**МИНИСТЕРСТВО ПРОСВЕЩЕНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ**

**МОБУ НШ-ДС д.Кутаново муниципального района Бурзянский район**

**Республики Башкортостан**

**МКУ Бурзянский РОО**

**МОБУ НШ-ДС д. Кутаново**

| | |
|---|---|
| РАССМОТРЕНО | УТВЕРЖДЕНО |
| на заседании педагогического совета | Директор |
| Протокол № 3 | ________________ Гадельшина Г.Р. |
| от «29» августа 2025 г. | Приказ № 84 от «29» августа 2025 г. |

**РАБОЧАЯ ПРОГРАММА**

**учебного предмета «Башҡорт теле»**

для обучающихся III класса

**д.Кутаново2025**

**Аңлатма яҙыу**

Рәсәй мәғарифын модернизациялау концепцияһында мәғариф алдына ҡуйған төпмаҡсат — баланы шәхес итеп үҫтереү.Рәсәй Федерацияһының мәғарифты үҫтереү программаһында ла «Дөйөм белем биреү мәктәбен модернизациялау нигеҙҙә уҡыусыларға билдәле күләмдә белем биреүҙе генә күҙ уңында тотмай, ә уны шәхес булараҡ үҫтереү, танып белеү һәм эшмәкәрлек һәләттәрен күреү» ҡыҙыл һыҙыҡ өҫтөнә алынған. Шул маҡсаттан сығып **башҡорт телен** уҡытыуҙың **төп мәсьәләләре** билдәләнде:

- телмәр эшмәкәрлеген формалаштырыу: тыңлау, һөйләү, уҡыу, яҙыу;
- тел системаһын (фонетика, лексика, орфография, орфоэпия, грамматика, пунктуация) өйрәнеү;
- башҡорт теле фәне аша тирә-яҡты, йәғни баланы ура-тып алған мөхитте, объекттарҙы, күренештәрҙе танып белергә өйрәтеү;
- башҡорт теле ғилемен өйрәнгәндә баланың шәхси мөмкинселектәрен иҫәпкә алып, уның һәләтен, эруди-цияһын формалаштырыу өсөн шарттар тыуҙырыу;
- тел ғилемен өйрәнеү процесында универсаль уҡыу эш төрҙәренә өйрәтеү; уҡыу эшмәкәрлегенең төп компонентта-рын үҙләштереү (уҡыу мәсьәләһе, проблема ҡуйыу; эште планлаштырыу, ойоштороу; уҡыу мәсьәләһен сисеү; эште баһалау; рефлексив-контроль эшмәкәрлек);
- милли үҙ-аңды формалаштырыуға нигеҙ һалыу. Башланғыс звеноны тамамлағас, әсә теле (башҡорт теле) урта һәм юғары звеноларҙа балаға үҫеш кимәлен камиллаштырыу ҡоралы булып хеҙмәт итә.

**Программа үҙенсәлектәренең характеристикаһы**

Башҡорт телен өйрәнеү курсы туған тел аша донъяны танып белеү, белем алыу һәм социаль өлкәлә шәхес итеп тәрбиәләү маҡсатын ҡуя.

***Беренсенән,***уҡыусыны уҡыу, белем алыу эшмәкәрле-генә өйрәтеү, фекерләү, аҡыл-аң ҡеүәһен үҫтереү; үҙен уратып алған һәр нәмәгә, күренешкә, хәл-ваҡиғаға үҙ ҡарашы, баһаһы булған шәхес итеп үҫтереү.

***Икенсенән,*** башҡорт балаларының күпселеге уҡырға үҙ телендә һөйләшеп килә, үҙ телендә фекер йөрөтә. Баланың аҡыл үҫешен тогҡарламау өсөн, уны үҙ телендә уҡытып алып китеү мөһим.

***Өсөнсөнән,***телде аралашыу, кешеләр менән хеҙмәттәш-лек итеү, мөнәсәбәт ҡороу ҡоралы итеп ҡулаллап өйрәтеү.

***Дуртенсенән,***башланғыс мәктәптә туған тел уҡытыуҙы, уҡытыу-тәрбиә эшен халҡыбыҙҙың бай мираҫына ҡороу төп шарт булып тора.

**Башҡорт теленә өйрәтеү эш программаһының төп принциптары**

**1. Һәр баланың шәхси үҙенсәлектәрен иҫәпкә алыу.**

Тәҡдим ителгән программаны хөкүмәт стандарты нормаларына яраҡлаштырып ҡороу күрһәтелгән принципты тормошҡа ашырыуға мөмкинселек бирҙе. Хөкүмәт стандарттары талаптарына ярашлы шәхси үҫеш, предмет һәм мета-предмет өлкәһендәге үҫеште уҡыу программаһына таянып, дәреслек материалдарын төрлө интеллектуаль кимәлдәге балалар өсөн эштәр менән тәьмин итеү бурысы тора. Был төрлө кимәлдәге үҫеш менән уҡырға килгән һәм шулай уҡ тәбиғәттән төрлө аң-аҡылға эйә булған балаларҙы программа йөкмәткеһен үҙләштереүҙе уның шәхси мөмкинселектәрен, булмышын иҫәпкә алып ойоштороуға булышлыҡ итәсәк.

**2. Фәнни-теоретик белем биреү.**

Телде өйрәнеүҙе төп фәнни-теоретик төшөнсәләрҙе үҙләштереүгә нигеҙләп ҡороу. Төп тел төшөнсәләрен баланың аң-зиһен кимәлен, фекерләү ҡеүәһен үҫтереү, аралашыу оҫталығын шымартыу объекты итеп ҡулланыу.

**3. Һәр баланы төрлө яҡлап өҙлөкһөҙ үҫтереү.**

Был принцип баланы аҡыллы, эмоциональ-эстетик, рухи-әхлаҡи, һау-сәләмәт йәшәргә өйрәтә. Тимәк, уҡытыусы ошо йүнәлештәрҙә тейешле шарттар булдырырға бурыслы.

**4. Баланың тәбиғәттән бирелгән, ата-бабалары булмы-шынан күскән ыңғай сифаттарын иҫәпкә алыу.**

Балаға тәбиғәттән бирелгән йәки ата-бабаһынан күскән аң, зиһен, фекерләү, эмоциональ булмыш, телмәр сфераларындағы ыңғай һыҙаттарҙы күтәреү, уларҙы иҫәпкә алып,баланың аҡылын үҫтереүҙе тормошҡа ашырыу. Башҡорт милләтенә, халҡына хае яҡшы сифаттарҙы нығытыу, дауам итеү.

5. **Әсә телен заманса аралашыу, коммуникатив эшмәкәрле мөнәсәбәт ҡороу ҡоралы итеп ҡулланыу**.

Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф тураһындағы», Башҡортостан Республикаһының «Башҡортостан халҡының телдәре тураһында»ғы закондарына нигеҙләнеп, шулай уҡ башҡорт теленең хөкүмәт статусына эйә булыуына таянып, бала үҙенең туған телен республика эсендә аралашыу теле итеп тойорға һәм ирекле һөйләшеү мөмкинселектәренә эйә булырға тейеш. Башланғыс мәктәптә әҙәби тел һәм ябай һөйләшеү - аралашыу күнекмәләренә башланғыс һалыу тигән һүҙ.

**Дөйөм белем биреү буйынса икенсе быуын дәүләт стандарттары уҡыусылар һәм уҡытыусылар алдына түбәндәге талаптарҙы һәм бурыстарҙы ҡуя.**

***Беренсенән,***уҡыусыны уҡыу, белем алыу эшмәкәрле-генә өйрәтеү, фекерләү, аҡыл-аң ҡеүәһен үҫтереү; үҙен уратып алған һәр нәмәгә, күренешкә, хәл-ваҡиғаға үҙ ҡарашы, баһаһы булған шәхес итеп үҫтереү.

Әлеге көндә мәктәптәрҙәге традицион алым буйынса уҡытыу балаға белемде әҙер көйөнсә аңлатып биреүгә, хәтерҙә ҡалдырыуға һәм нығытыуға йүнәлтелгән күнегеүҙәр эшләүгә ҡоролған. Дәрестә уҡытыусы өҫтөнлөк итә, уҡыусы иһә тыңлаусы һәм уның ҡушҡанын үтәүсе генә булып ҡала. Белем биреүҙе шулай ҡорғанда баланың уҡыуға булған дәрте оҙаҡҡа бармай. Өлкән кластарҙа күпселек уҡыусыла ул ҡыҙыҡһыныу һүнеп тә ҡала.

Ғалимдарҙың раҫлауынса һәм мәктәп практикаһында белем алыуға ынтылыш, ҡыҙыҡһыныу уятыусы һәм этәргес көс, эске мотив булып дәрестә проблемалы уҡытыу мәсьә-ләһе тора. Ҡуйылған уҡыу проблемаһы ярҙамында дәрестә өйрәнелергә тейеш булған темаға теге йәки был күренешкә, хәл-ваҡиғаға ҡарата тыуҙырылған ҡыҙыҡһыныу - баланы ҡуйылған проблеманы хәл итеү юлдарын, ысулдарын эҙләүгә, тикшеренеү эшен тормошҡа ашырыуға - үҙ аллы белем алыуға юл аса. Бала белеменә, тәжрибәһенә таянып, был эшкә тотонорға баҙнат итә. Баланың инициативаһын, ынтылыш күрһәтеүен маҡтап, психологик атмосфера тыуҙырыу тейешле күргәҙмә әсбаптар менән тәьмин итеү мотлаҡ. Дәрестә һәр саҡ тыуҙырылған бындай мотив балала белемде ҡыҙыҡһынып алыуға этәргес сара, шарт булып һанала. Уҡытыусы дәрестә махсус рәүештә тейешле ситуация, «интеллектуаль конфликт» (коллизия), йәғни ҡаршылыҡ тыуҙырып, баланы уйларға мәжбүр итә: мин кисә (аҙна йәки ай элек) өйрәнгән ҡағиҙә (алгоритм, ысул, закон һ. б.) килеп тыуған уҡыу проблемаһын сисеү өсөн бармай; ни эшләргә, был проблеманы хәл итеү юлын, ысулын эҙләп табырға кәрәк. Был осраҡта уҡыусы әлегә тиклем алған белеменең етерлек булмауын аңларға тейеш. Шулай итеп, бала күрһәтелгән проблеманы әлегә белей етмәүен төшөнөп, үҙенең бурыстарын күҙаллай, уның аңында был мәсьәләне тормошҡа ашырыу ысулдары төҫмөрләнә

башлай һәм уҡытыусы етәкселегендә бала үҙ алдына маҡсат ҡуя, эште планлаштырырға өйрәнә һәм уны тормошҡа ашырыу буйынса конкрет эш башлай.

Уҡыусы - дәрестә тыңлаусы ғына түгел, киреһенсә, фе-керләүсе, эҙләүсе, белем алыусы ла. У л дәрестә уҡытыусы менән тиң ҡатнашырға һәм эшләргә тейеш. Шуға күрә

уҡытыу программаһында «уҡытыусы - уҡыусы» һәм «уҡыусы - уҡыусы» мөнәсәбәтен дөрөҫ ойоштороуға ҙур иғтибар бирелә.
Мәктәп ишеген тәү башлап асҡан баланы уҡыу эшмә-кәрлегенә өйрәтә башлау еңелдән түгел. Беренсе, икенсе кластарҙа белем алыу бер аҙ уйынға ла оҡшабыраҡ китә. Беҙҙең дәреслектәрҙә әкиәттән килгән шәхестәр, Отҡор исемле зат, Бикә менән Булат кеүек балалар, уларҙың атаһы ҡатнаша. Атай кеше телдең серҙәрен күрергә ярҙамлаша, балаларына проблема ҡуя, кескәйҙәр уйлана, эҙерләнә, эҙләнә, хаталана. Уларға ҡушылып, уҡыусылар за эҙләнә, хаталарын төҙәтә, телебеҙҙең серҙәренә төшөнә. Бында мо-делдәр, схемалар, шаҡмаҡтар ярҙамға килә. Телмәр берә-мектәрен ишетеп, күреп, хатта тотоп ҡарай. Бала аныҡ, конкрет һиҙемләй, әкренләп төшөнсәләр менән эш итергә өйрәнә. Һөҙөмтәпә фекере баҫҡыслап күтәрелә. Ғилми уҡытыуға нигеҙ һалына башлай.
***Икенсенән,*** башҡорт балаларының күпселеге уҡырға үҙ телендә һөйләшен килә, үҙ телендә фекер йөрөтә. Баланың аҡыл үҫешен тогҡарламау өсөн, уны үҙ телендә уҡытып алып китеү мөһим. Рус теленә өйрәтеү балаларҙың башҡорт теле дәрестәрендә алған белемдәренә (грамотаға өйрәтеү, уҡыу-яҙыу күнекмәләре биреү, ҡайһы бер тел өлкәһендәге дөйөм тошөнсәләр) нигеҙләнеп өйрәтелә.
***Өсөнсөнән,***телде аралашыу, кешеләр менән хеҙмәттәш-лек итеү, мөнәсәбәт ҡороу ҡоралы итеп күҙаллап өйрәтеү. Илдәге сәйәси-иҡтисади, социаль шарттарҙың ҡырҡа үҙгәреүе кешенең йәмғиәттәге тәғәйенләнешенә, йәшәйеш шарттарына етди үҙгәрештәр индерә. Йәмғиәттә баланың шәхес булараҡ үҙ урыны, рухи һәм материаль байлыҡтарға :шә булырға булышлыҡ иткән шөғөлө, эш урынында бер йүнәлештә хеҙмәттәшлек иткән, рухи донъяһына ауаздаш дуҫ-иштәре булырға тейеш. Шулай уҡ, төрлө ситуация, ерлектә уның уй-фекере менән килешеп бөтмәгән, тәнҡит күҙлеген белдергән кешеләр менән эш итә белеү, уларҙы шәхес-кеше булараҡ ихтирам итеп таныу, төрлө ситуатив шарттарҙа алған маҡсатка ирешеү өсөн улар менән дөрөҫ мөнәсәбәт ҡороу, мәҙәниле аралашыу серҙәренә өйрәнеү ҙур әһәмиәткә эйә. Быға баланы кесе йәштән өйрәтә башлау, мәктәптән һуң үҙ аллы тормош юлына баҫҡан үҫмергә хеҙмәт юлында кешеләр менән һыйышып, ярҙам итеүсе кешелек һыҙаттарын, ҡылыҡ-булмышын формалашты-рыуҙа ҙур әһәмиәткә эйә.

Бәләкәй бала һөйләшеүгә әүәҫ. Беренсе класҡа килгән алты-ете йәшлек баланың да һөйләшеүгә дәрте ҙур. Уның ошо теләген иҫәпкә алып, фекерен, телмәрен үҫтереү өсөн тейешле шарттар тыуҙырыу мөһим. Бер партала ултырған ике уҡыусы үҙ-ара һөйләшергә, фекер алышырға тейеш. Улар ғаиләһе, ата-әсәһе, туғандары тураһында, өйҙәге, мәктәптәге эштәре буйынса ла һөйләшәләр. Уҡыусы үҙ уйын тартынмай әйтеп бирһен өсөн, шарттар булдырыла. Бала уҡытыусыға ла һорау ҡуйырға баҙнат итә. Уҡыған текстың йөкмәткеһен аңлағас, ул был әҫәр буйынса иптәшенә һорауҙар бирә башлай. Һорай белеү, һорау ҡуя белеү, йәғни үҙең белмәгәнде асыҡларға баҙнат итеү юғары баһалана.
Икешәр, дүртәр-бишәр уҡыусы төркөмдәргә бүленеп эшләгәндә, бала һорау бирергә, фекерен үҙенсә әйтергә һәм яҡларға, кешенең әйткәнен иғтибар менән тыңлап, уны баһаларға әкренләп өйрәнә башлай. Уй-фекерен аныҡ итеп әйтергә кәрәклеген төшөнә, иптәштәренә лә иғтибарлы була бара.
Тәүге осорҙа баланың телен асыуҙы үҙ-ара һөйләшеүгә (диалогка) ҡорғанда, артабан эҙмә-эҙлекле әйтеп биреүгә (монологка) күсеү ҡарала.
Телмәрҙе аралашыу ҡоралына, фекереңде аныҡ әйтеп бирә белеү сараһына әүерелдереү алымдары ла бик күп. Улар кластан класҡа ҡатмарлана барасаҡ. Ҡыҫҡаһы, яңы программала телмәр үҫтереүгә ҙур урын бирелә.
***Дуртенсенән,***башланғыс мәктәптә туған тел уҡытыуҙы, уҡытыу-тәрбиә эшен халҡыбыҙҙың бай мираҫына ҡороу төп шарт булып тора. Ошонан сығып, дәреслектәрҙә халыҡ ижа-ды ҡомартҡылары - әкиәт, йомаҡ, мәҡәл, әйтем, көләмәс, тиҙәйткес, һамаҡлау, һанашмаҡтарҙы ҡулланыуға иғтибар ителә. Халыҡтың тарихы, йыр-моңо, шөғөл-кәсептәре, тор-мош-көнкүрештәре, этнографияһы менән баланы әкренләп, эҙмә-эҙлекле таныштыра барыу за маҡсат итеп ҡуйыла. Ошо хазинаны уҡыусыға кесе йәштән таныта барыу, күңеленә һеңдереү изге бурыс итеп һанала.

Баланы халҡыбыҙҙың тамырҙарына ҡайтарыу, түбән кластарҙан уҡ йәлеп итеү мәктәп алдындағы изге бурыс.

***Бишенсенән,*** башланғыс мәктәптә уҡытылған бүтән фәндәрҙе - рус теле һәм уҡыу, тәбиғәтте өйрәнеү, математика, һынлы сәнғәт, музыка өлкәһендәге белемдәрен һ. б. әсә теле фәне менән тығыҙ бәйләнештә уҡытыу мөһим. һөҙөмтәлә башланғыс мәктәптә уҡытыу-тәрбиә эше дөйөм бер система булып тора.

**Уҡыу йылына сәғәттәр һаны:**

3-**сө класс.** «Башҡорт теле», бөтәһе 102сәғәт, шул иҫәптән 34 дәрес - дәрестән тыш сәғәт(внеурочное занятие)
34 аҙна x 2 сәғәт (68 сәғәт) һәм 34 дәрестән тыш сәғәт иҫәбенән планлаштырылды
Шул иҫәптән
Программа материалы түбәндәге уҡыу әсбаптары ни-геҙендә тормошҡа ашырыла:
• « Башҡорт теле» дәреслеге, ике киҫәктән (автор Ф. Ш. Сынбулатова, Исламлоғолова Ы.Ә.);
• «Башҡорт теле» дәреслегенә эш дәфтәре, ике киҫәктән (автор Ф. Ш. Сынбулатова, Исламлоғолова Ы.Ә);

| № | Дәрес темаһы | Сәғәт һаны | Үткәреү ваҡыты | |
|---|---|---|---|---|
| | | | Факт. | План. |
| 1 | Һаумы, мәктәп! Байрам менән, хөрмәтлеөсөнсөләр! | 1 | 02.09 | |
| 2 | Низәр иҫемдә? Нимәләрҙе онотҡанмын? | 1 | 03.09 | |
| 3 | Һөйләм аҙағында тыныш билдәләре. | 1 | 05.09 | |
| 4 | Һөйләмдә тыныш билдәләре. | 1 | 09.09 | |
| 5 | Кешенең исем-фамилиялары. | 1 | 10.09 | |
| 6 | Кешенең исем-фамилиялары. Хайуан ҡушаматтары. | 1 | 12.09 | |
| 7 | Әҙәби әҫәр, китап исемдәре. | 1 | 16.09 | |
| 8 | Гәзит-журнал, телерадио | 1 | 17.09 | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | тапшырыуҙары исемдәре. | | | |
| 9 | Ер-һыу атамалары. | 1 | 19.09 | |
| 10 | Тикшереү эше№ 1. | 1 | 23.09 | |
| 11 | Башҡорт теленең төп законы. | 1 | 24.09 | |
| 12 | Нәҙек һәм ҡалын һуҙынҡылар. | 1 | 26.09 | |
| 13 | Көҙ тураһында иншаға әҙерлек. | 1 | 30.09 | |
| 14 | Инша “Таң ҡалдырғыс күренеш”. | 1 | 01.10 | |
| 15 | Тартынҡыөндәр. Парлыһәмпарһыҙ, яңғырауһәмһаңғыраутартынҡылар. | 1 | 03.10 | |
| 16 | Танау тартынҡы өндәре. | 1 | 07.10 | |
| 17 | [К-г],[ҡ-ғ],[п-б] өндәренең сиратлашыуы. | 1 | 08.10 | |
| 18 | Тикшереү эше№ 2. | 1 | 10.10 | |
| 19 | Сит телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәр. | 1 | 14.10 | |
| 20 | Ситтелдәрҙәнүҙләштерелгәнһүҙҙәрҙәҡалынһәмнәҙекәйтелешлеижектәрҙеңҡатнашкилеүе. | 1 | 15.10 | |
| 21 | Рустеленәнүҙләштерелгәнһүҙҙәрҙәялғауҡушыуүҙенсәлектәре. | 1 | 17.10 | |
| 22 | Рустеленәнүҙләштерелгәнһүҙҙәрҙәялғауҡушыуүҙенсәлектәре. | 1 | 21.10 | |
| 23 | Ситтелдәрҙәнүҙләштерелгәнһүҙҙәрҙәялғауҙар. | 1 | 22.10 | |
| 24 | *Чч, Щщ, Цц, Ёё*хәрефлеһүҙҙәр. | 1 | 24.10 | |
| 25 | Ике өндө белдереүсе хәрефтәр. | 1 | 05.11 | |
| 26 | Ике өндө белдереүсе хәрефтәр. | 1 | 07.11 | |
| 27 | *Яя, Ее, Юю* хәрефле һүҙҙәр. | 1 | 11.11 | |
| 28 | *Яя, Ее, Юю* хәрефле һүҙҙәр. | 1 | 12.11 | |
| 29 | *Яя, Ее, Юю* хәрефле һүҙҙәр. | 1 | 14.11 | |
| 30 | Тикшереү эше№ 3. | 1 | 18.11 | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 31 | Һүҙ нисек яһала? | 1 | 19.11 | |
| 32 | Һүҙьяһалыш. | 1 | 21.11 | |
| 33 | Ялғау төрҙәре. | 1 | 25.11 | |
| 34 | Һүҙ яһаусыһәмүҙгәртеүсеялғауҙар. | 1 | 26.11 | |
| 35 | Һүҙ яһаусыһәмүҙгәртеүсеялғауҙар. | 1 | 28.11 | |
| 36 | Һүҙ яһаусыһәмүҙгәртеүсеялғауҙар. | 1 | 02.12 | |
| 37 | Тикшереү эше№ 4. | 1 | 03.12 | |
| 38 | Әйтелгәнсә яҙылмай торған һүҙҙәр. | 1 | 05.12 | |
| 39 | Тамырында ла, ялғауында ла *о*! Тамырында ла, ялғауында ла *ө*! | 1 | 09.12 | |
| 40 | Тамырында ла, ялғауында ла о! Тамырында ла, ялғауында ла ө! | 1 | 10.12 | |
| 41 | Тамырында ла, ялғауында ла о! Тамырында ла, ялғауында ла ө! | 1 | 16.12 | |
| 42 | Тамырында ла, ялғауында ла о! Тамырында ла, ялғауында ла ө! | 1 | 17.12 | |
| 43 | Ҡуш тартынҡылы һүҙҙәр. | 1 | 19.12 | |
| 44 | Ҡуш тартынҡылы һүҙҙәр. | 1 | 23.12 | |
| 45 | Ҡуш тартынҡылы һүҙҙәр. | 1 | 24.12 | |
| 46 | Ҡуш тартынҡылы һүҙҙәр. | 1 | 26.12 | |
| 47 | Ҡуш тартынҡылы һүҙҙәр. | 1 | 30.12 | |
| 48 | Ҡуш тартынҡылы һүҙҙәр. | 1 | 13.01 | |
| 49 | Тикшереү эше№ 5. | 1 | 14.01 | |
| 50 | Ҡушма һүҙҙәр. Уларҙың яһалышы. | 1 | 16.01 | |
| 51 | Ҡушма һүҙҙәр. Уларҙың яһалышы. | 1 | 20.01 | |
| 52 | Ҡушмаһүҙҙәрҙәьһәмъбилдәләреҡа саняҙыла? | 1 | 21.01 | |
| 53 | Ҡушмаһүҙҙәрҙәьһәмъбилдәләреҡа саняҙыла? | 1 | 23.01 | |
| 54 | Һыҙыҡсаашаяҙылыусыҡушмаһүҙҙәр. | 1 | 27.01 | |
| 55 | Һыҙыҡсаашаяҙылыусыҡушмаһүҙҙә | 1 | 28.01 | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | р. | | | |
| 56 | Ҡыҙыҡсааашаяҙылыусыҡушмаһүҙҙәр. | 1 | 30.01 | |
| 57 | Ҡушма һүҙҙәрҙең яҙылышы. | 1 | 03.02 | |
| 58 | Тикшереү эше№ 6. | 1 | 04.02 | |
| 59 | Һөйләм. Башһәмэйәрсәнкиҫәктәр. | 1 | 06.02 | |
| 60 | Һөйләм. Башһәмэйәрсәнкиҫәктәр. | 1 | 10.02 | |
| 61 | Һөйләмдә һүҙҙәр бәйләнеше. | 1 | 11.02 | |
| 62 | Текст. | 1 | 13.02 | |
| 63 | Һүҙбәйләнештәр. Күсмә мәғәнәле һүҙбәйләнештәр. | 1 | 17.02 | |
| 64 | Тикшереү эше№ 7. | 1 | 18.02 | |
| 65 | Телмәртөрҙәре. Һөйләүтелмәре. Монолог. | 1 | 20.02 | |
| 66 | Һөйләү телмәре. Монолог. | 1 | 24.02 | |
| 67 | Һөйләү телмәре. Монолог. | 1 | 25.02 | |
| 68 | Һөйләү телмәре. Диалог. | 1 | 27.02 | |
| 69 | Һөйләү телмәре. Диалог. | 1 | 03.03 | |
| 70 | Һөйләү телмәре. Диалог. | 1 | 04.03. | |
| 71 | Тикшереү эше№ 8. | 1 | 06.03 | |
| 72 | Яҙма телмәр. Текст. | 1 | 10.03 | |
| 73 | Яҙма телмәр. Текст. | 1 | 11.03 | |
| 74 | Яҙма телмәр. Текст. | 1 | 13.03 | |
| 75 | Яҙма телмәр. Инша, изложение. | 1 | 17.03 | |
| 76 | Яҙма телмәр. Хат, көндәлек. | 1 | 18.03 | |
| 77 | Яҙмателмәр. Шиғыр. Әкиәт. Хикәйә. | 1 | 24.03 | |
| 78 | Яҙмателмәр. Шиғыр. Әкиәт. Хикәйә. | 1 | 25.03 | |
| 79 | Шиғыр нисек яҙыла? | 1 | 27.03 | |
| 80 | Шиғыр нисек яҙыла? | 1 | 07.04 | |
| 81 | Шиғыр нисек яҙыла? | 1 | 08.04 | |
| 82 | Яҙма телмәр Әкиәт. | 1 | 10.04 | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 83 | Әкиәт ижад итеү. | 1 | 14.04 | |
| 84 | Әкиәт ижад итеү. | 1 | 15.04 | |
| 85 | Әкиәт, хикәйә ижад итеү. | 1 | 17.04 | |
| 86 | Яҙма телмәр. Хикәйә. | 1 | 21.04 | |
| 87 | Хикәйә ижад итеү. | 1 | 22.01 | |
| 88 | Хикәйә ижад итеү. | 1 | 24.04 | |
| 89 | Телмәртөрҙәре. Аҡыллытекстар. Бәләкәйкүләмлежанртөрҙәре. | 1 | 28.04 | |
| 90 | Бәләкәйкүләмлежанртөрҙәре. Өлкәндәрҙеңәйткәне. | 1 | 29.04 | |
| 91 | Тапҡыр мәғәнәле һүҙҙәр. | 1 | 05.05 | |
| 92 | Өләсәйемдең, олатайымдың әйткәне. | 1 | 06.05 | |
| 93 | Өләсәйемдең, олатайымдың әйткәне. | 1 | 08.05 | |
| 94 | Ололарһүҙенәколаҡһал, унанүҙеңәаҡылал! | 1 | 12.05 | |
| 95 | Ололарһүҙенәколаҡһал, унанүҙеңәаҡылал! | 1 | 13.05 | |
| 96 | Тикшереү эше№ 9. | 1 | 15.05 | |
| 97 | Һаумы, йәмле йәй! | 1 | 19.05 | |
| 98-99 | Һоҡланам мин йәйге матурлыҡҡа! | 2 | 20.05 22.05 | |
| 100-101 | Йәйге каникулда тәбиғәтте ҡайғыртып... | 2 | 26.05 | |
| 102 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 1 | | |